*Лилиә КӘРИМОВА*

# ЙОНДОҘ БАЛКЫШЫ

*Ихсан ауылы йылғаларға ла, шишмәләргә лә бай, ә тирә-яғында сикһеҙ дала йәйелеп киткән. Бәләкәй Мәғәфүрә ошо дала киңлектәрен, унын талғын елдәрен, саф шишмәләрен үҙ итеп үҫә. Киләсәктә сәскә атыр йырсының һәләте ошонда бөрөләнә. Мәғәфүрәгә көслө йоғонто яһаған икенсе ауыл — Әхмәт. Зифа ҡайындар, бөҙрә талдар уратып алған ауылдың уртаһында ҙур күл дә бар.*

*Мәғәфүрәгә ете йәш тулғас, уларҙың ғаиләһе Өфөгә күсеп килә. Ул 2-се өлгөлө мәктәпкә уҡырға төшә. Бәләкәйҙән үк йырларға ярата, артист булырға хыяллана. Мәктәптәге бер генә концерт та унан башҡа үтмәй, әхирәттәре, туғандары ла Мәғәфүрәнең йырлағанын яратып тыңлай. Барыһы ла киләсәктә унын йырсы булырына ышана, уҡырға кәңәш итәләр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Мәғәфүрәгә 15 йәш тулғанда атаһы үлеп китә. Ғаиләлә иң өлкәне булған ҡыҙға әсәһенә ярҙам итергә, кескәй һеңлеләрен ҡарашырға тура килә һәм ул мәктәпте тамамлағас та эшләй башлай.*



*Тормош үҙ яйы менән бара, әммә йырсы булыу хыялы үҙенә әйҙәй. Йыр ишетһә, донъяһын онотоп тыңлай, Мәғәфүрә айырыуса Хәбир Ғәлимовтың йомшаҡ тембрлы тауышын үҙ итә, унын йырҙарын отоп алырға тырыша. Аҡсаһы булһа, унын йырҙары яҙылған грампластинкаларҙы һатып ала, ҡыҫҡаһы, йырһыҙ йәшәүен күҙ алдына ла килтермәй. Ғаиләнең матди хәле шәптән булмағас, консерваторияла уҡыу хыялы тормошҡа ашмай ҡала килә.*

*Әммә театр хаҡында уйҙары һис тә тынғы бирмәй Мәғәфүрәгә, һәм ул Башҡорт академия драма театрында көсөн һынап ҡарарға була. Был театрҙы күптән үҙ итә ул, тамашаларға йөрөргә аҡсаһы булмағанлыҡтан, төрлө хәйләләр ҙә ҡора: сәғәт*

*Лилиә Әхмәт ҡыҙы Кәримова (Дәүләтова) 1925 йылда күренекле ғалим, профессор, Башҡорт кавалерия дивизияһының баш хирургы Әхмәт Сәғәҙәтгәрәй улы Дәүләтов ғаиләһендә тыуған.*

*Урта мәктәпте тамамлағас, вокал класы буйынса Урал дәүләт консерваторияһында уҡый (1945-1951). 1951-1962 йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында эшләй. Әлеге көндә Өфө дәүләт сәнғәт институтында һәм училищеһында уҡыта.*

5-тә театрға килә (ә тамашалар киске 7 сәғәттә башлана) һәм дежурныйға баш режиссер М.Мәһәҙиевҡа килеүен әйтеп, үтеп китә. Тамаша башланғансы, ике сәғәт буйы, эскәмйәләр аҫтында ҡасып ултыра. Залға тамашасылар керә башлағас, йәшенгән урынынан сыға ла спектаклде ҡарай. Шулай йөрөй торғас, бер мәл ҡыйыулығы етеп, режиссер Мәкәрим Мәһәҙиев менән осрашырға ҡарар итә. Мәкәрим ағаһы бик ихлас ҡабул итә уны, шиғыр һөйләтеп, бейетеп ҡарай. Режиссер бер нәмә лә өндәшмәгәс, ҡыҙыҡай ҡаушап ҡала. «Ә йырлай беләһеңме?» — тип һорай М.Мәһәҙиев. Мәғәфүрә уйлап та тормай, «Ил ҡыҙы» тигән йырҙы йырлай башлай. Ҡыҙҙың йырлауына һоҡланып бөтә алмай режиссер, киләсәктә уның танылған йырсы булып китәсәген әйтә. Һәм яңылышмай.

Башҡортостан радиокомитеты эргәһендә рус һәм башҡорт хорҙары эшләп килә. Мәғәфүрә уларҙың икеһенә лә йөрөргә өлгөрә. Хорҙың һәр сығышында ҡатнашыу уның өсөн оло байрамға әйләнә.

Мәғәфүрәнең профессиональ йырсыны күргеһе, уның менән танышҡыһы килә. Бирәһе килгән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тиҙәр. Шулай бер саҡ мамыҡ шәлгә төрөнгән кешене күреп ҡала. Мәшһүр йырсы Хәбир Ғәлимов булып сыға ул. Мәғәфүрә аптырап ҡала: «Бөтә йырсылар ҙа шәлгә уранып йөрөйҙәрме икән ни?» тип уйлай. Икенсе тапҡыр маһир йырсылар менән әхирәтендә ҡунаҡта осраша. Улар Мәскәүҙә уҡып йөрөгән, әле каникулға ҡайтҡан Сәлих Хөснийәров һәм Ғәлим Байков (һуңынан музыка училищеһының директоры) булып сыға. Егеттәрҙең йырлауын һорайҙар. Сәлих Хөснийәров ризалыҡ бирә, ләкин бөтә форточкаларҙы ла ябыуҙы үтенә. Һалҡын тейеүҙән ҡурҡа икән. «Ерән ҡашҡа» тигән йырҙы башҡара Сәлих. Мәғәфүрә уның һыуыҡтан ҡурҡыуына ғәжәпләнһә лә, йырлауын оҡшата.

Күп тә үтмәй, Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры эргәһендә хор студияһына йырсылар тупланыуы хаҡында ишетә. Был хор коллективына оҫта хормейстер Анатолий Тихомиров етәкселек итә. Мәғәфүрәне лә коллективҡа алалар. Бына шулай әүҙем эш башлана. Алты ай үтеүгә ул ноталарҙы үҙләштерә, уларҙы тиҙ уҡырға өйрәнә. Аҡрынлап уға спектаклдәрҙәге бәләкәй ролдәрҙе бирә башлайҙар: Джованна, Паж, Мадлена кеүек эпизодик ролдәрҙе оҫта башҡарыуға өлгәшә Мәғәфүрә. Ул йылдарҙа театрҙа баш дирижер булып П.М.Славинский эшләй.

Бер ваҡыт театр етәкселәре Брусиловскийҙың «Ер Тарғын» операһын сәхнәгә ҡуйырға ҡарар итә. Унда меццо-сопрано тауышлы йырсы кәрәк икән. Төп ролгә тәғәйенләнгән М.Мәксүтова дирижерға оҡшамай — музыканы тиҙ тойомлап етмәй, ритмикаһы аҡһай. П.Славинский төп ролде башҡарыусы йырсыны эҙләй башлай. Бөтә хор коллективын тыңлап бөткәс, Мәғәфүрә Сәлиғәскәроваға туҡтала. Спектаклдең премьераһы бик уңышлы үтә, айырыуса Мәғәфүрәнең йырлауын оҡшата тамашасылар.

Ул йылдарҙа театрҙа педагог-консультант булып Р.Л.Фишер эшләгән була. Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова унда шөғөлләнергә теләк белдерә, әммә Римма Лазаревна уға артыҡ иғтибар итмәй, нигеҙҙә театрҙың танылған йырсылары менән генә эшләүен дауам итә. Мәғәфүрәнең үҙенә тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ күрһәтергә ҡала. Римма Лазаревнаның күҙенә салыныр өсөн көн һайын сәғәттәр буйы уның ишек төбөндә тора йырсы. Ишек төбөндә торғанын күргән һайын Фишер: «Һин һаман бындамы ни? Кер улайһа», — тип ғәжәпләнә. Мәғәфүрәнең тырышлығы, тауышы Фишергә оҡшап ҡала, ул вокал менән генә шөғөлләнмәйенсә, опера партияларын да өйрәтә башлай. Иң тәүҙә «Аҡ елән» партияһын өйрәнәләр. М.Сәлиғәскәрова дирижер П.М.Славинский менән вокал буйынса педагогы Р.Л.Фишерҙы үҙенең төп уҡытыусылары тип иҫәпләй. Тәүҙә, дирижерҙың ҡул хәрәкәттәрен аңламаған саҡта, П.Славинский түҙемле рәүештә аңлата, бернисә тапҡыр күрһәтеп, һанап өйрәтә. Тиҙҙән Мәғәфүрә бер нисә опера партияһын, шул иҫәптән Д.Вердиҙың «Риголетто»һында бер юлы өс партияны: Джованна, графиня Чепрано һәм Паж ролдәрен өйрәнә. Ҡайһы ваҡыт ул бер операла бөтә өс ролде лә башҡара.

Театр П.Чайковскийҙың «Евгений Онегин» операһын сәхнәгә ҡуйырға тотонғанда ундағы партияларҙы Мәскәү консерваторияһын тамамлап ҡайтҡан йырсылар башҡарырға тейеш була. Оль-

га партияһын диплом эше итеп алған артистканы әҙерләгән дирижер ҙа уны Мәғәфүрә Сәлиғәскәроваға бирергә теләмәй. Әммә П.Славинский үҙ һүҙендә тора һәм был партияны Мәғәфүрәгә тапшыралар.

«Аҡбуҙат» операһын сәхнәләштергәндә меццо-сопрано тауышлы партияны башҡарырға М.Мәҡсүтова тәғәйенләнә. Репетицияларҙың береһендә ул опералағы ҡайһы бер өлөштәрҙе дөрөҫ йырлай алмай. Йәне көйгән П.Славинский бөтә залды яңғыратып: «Муся, һин былдамы?» — тип һорай. Бәхеткә күрә, Мәғәфүрә галеркала репетицияны ҡарап ултыра икән. Йәһәт кенә сәхнәгә М.Мәҡсүтова янына сығып баҫа. Шул ваҡыт Славинский, йырсыларға алмашырға ишара яһап, таяҡсаһын күтәрә. Мәғәфүрә оҫта ритм һәм аныҡ интонация менән йырлап алып китә. Премьера бик уңышлы үтә. Был партияны башҡарғандан һуң артист А.Хәбибуллин: «Ғәжәп, Сәлиғәскәрованы нишләп һаман да солистка итеп күсермәй хорҙа тоталар икән?» — тип аптырай. Күп тә үтмәй Мәғәфүрәне күсерәләр һәм уның өсөн ҙур ижади тормош башлана.

П.Славинский киткәс эшләгән бөтә дирижерҙар М.Сәлиғәскәрованы һәр саҡ төп партияларҙы йырларға саҡыралар. Ул Гунонның «Фауст» операһында — Зибель, «Евгений Онегин»да Ольга менән Няня партияларын башҡара. Ж.Бизеның «Кармен» операһы йырсыны яңы йондоҙлоҡҡа алып сыға. 1945 йылда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына дирижер Ковальский килә һәм, Мәғәфүрәнең йырлауын ишетеп, «Кармен» операһын сәхнәгә ҡуя.

Ғөмүмән, театрҙа уны бик ихтирам итәләр. Төҫкә сибәр, зифа буйлы ҡыҙға күҙ һалыусы егеттәр ҙә байтаҡ. Театрҙың рәссамы Мөхәммәт Арыҫланов та оҡшатып йөрөй. 1943 йылда Мәғәфүрә Ғәлиулла ҡыҙы опера театрының баш рәссамы Мөхәммәт Арыҫлановҡа (әлеге мәлдә РСФСР-ҙың халыҡ рәссамы) кейәүгә сыға.

1947 йылда Мәскәүҙә йәш йырсыларҙың фестивале үтә. Унда Мәғәфүрә лә ҡатнаша һәм, Н.Йыһановтың «Алтынсәс» операһынан Туғаҙаҡ һәм үҙенең ятаҡан Кармен партияларын башҡарып, беренсе урынды яулай. Талапсан Мәскәү тамашасылары уның ҡурайға ҡушылып башҡорт халыҡ йырҙарын йырлауын да ихлас ҡабул итә. Мәғәфүрәне артабан Прагала сығыш яһау өсөн һайлап алалар.

Клемент Готвальд етәкселегендәге Чехословакия хөкүмәте ойошторған ҡабул итеү банкетында совет артистары хөрмәтенә бик күп маҡтау һүҙҙәре әйтелә. Театрҙа Мәғәфүрәне ҙур хөрмәт менән ҡаршылайҙар. Уны киноға төшөрәләр, «Ауыл уҡытыусыһы» тигән фильмда М.Сәлиғәскәрова үҙенең йыры аша актриса В.Марецкаяның тауышын сағылдыра.

Уны башҡа театрҙарға ла йырларға саҡыралар. Мәҫәлән, Һарытауҙа «Батша кәләше» операһында Любаша партияһын башҡарып дан ҡаҙана. Свердловскиҙа П.Бородиндың «Кенәз Игорь» операһынан Кончаковна партияһын бернисә тапҡыр йырлай, Ырымбурға концерт менән бара, БАССР-ҙың халыҡ артисы Ғ.Хәбибуллин менән бергәләп концерттар менән бөтә Урта Азияны йөрөп сығалар. Хәбибуллин концерттың 1-се бүлегендә, Мәғәфүрә икенсе бүлегендә йырлай. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының опера труппаһы һәр йәй төрлө ҡалаларға гастролгә китә. Бар ерҙә театр сығыштарына ҡарата яҙылған рецензияларҙа Мәғәфүрә Сәлиғәскәрованың ижадына юғары баһа бирелә. Рязань ҡалаһының «Сталин байрағы» гәзите уның хаҡында, мәҫәлән: «М.Сәлиғәскәрова ижад иткән һәр образ күңелдәрҙә тәрән тәьҫир ҡалдыра. Йәш һәм талантлы актриса үҙ геройҙарының ижтимағи һәм психологик асылын тәрән асыуҙа ижади мөнәсәбәт күрһәтә. «Фауст» операһындағы Зибель уның башҡарыуында дәртле йәшлек, тоғро мөхәббәт, сикһеҙ бирелгәнлек өлгөһө булып кәүҙәләнә. Д.Вердиҙың «Аида»һындағы Амнерис образын М.Сәлиғәскәрова иң оҫта башҡарыусы булып тора».

Әүҙем ижади тормош менән бер рәттән М.Х.Сәлиғәскәрова йәмәғәт эшендә лә ихлас ҡатнаша. 1957 йылда уны 3-сө саҡырылыш РСФСР Юғары Советы депутаты итеп һайлайҙар, даими рәүештә ҡала советында депутат булып тора. Һуңғы йылдарҙа сәнғәт ветерандары советы рәйесе вазифаһын башҡара.